ПУБЛИЦИСТИКА

***Сәбилә СӨЛӘЙМӘНОВА,***
***педагогия фәндәре кандидаты***

# Көрәштә тыуған батыр



*Шәмсетдин Ғафаров*

Граждандар һуғышы геройы, ике Ҡыҙыл Байраҡ ордены кавалеры, совет ҡоролошон нығытышыуға ғүмерен бағышлаған Баймаҡ батыры Шәмсетдин Шәйхетдин улы Ғафаровтың тыуыуына 120 йыл тула.

Тарихтан билдәле, 1918 йылдың 16 сентябрендә Граждандар һуғышында айырыуса батырлыҡ күрһәткән яугирҙарҙы наградлау өсөн Бөтә Рәсәй Үҙәк Башҡарма Комитеты тарафынан йәш Совет дәүләтенең иң юғары наградаһы — Ҡыҙыл Байраҡ ордены булдырыла. Совет власының ошо тәүге ордены кавалерҙары дәрәжәһе буйынса Советтар Союзы Геройҙарына тиң. Ә был исем инде һуңыраҡ, 1934 йылда булдырыла.

Граждандар һуғышының үлемесле алыштарында йән аямай һуғышҡан өсөн ун биш мең тирәһе яугир Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән наградлана, әммә был наградаға ике-өс һәм унан күберәк тапҡыр лайыҡ булғандар иҫәпле генә. Мәҫәлән, Башҡортостандан күренекле ҡыҙыл командир С.С.Вострецов — дүрт; ил етәксеһе булырҙай һәләтле, уҡымышлы, ғәййәр, илем-халҡым тип янған батырыбыҙ Муса Мортазин — өс; Шәмсетдин Ғафаров — ике; Әбйәлил районы егете И.Х.Фәтхетдинов ике орден менән наградлана.

Шәмсетдин Ғафаров 1896 йылда Баймаҡ районының Ҡолсора ауылында ярлы крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. 11—12 йәшкә еткәс, Темәс байҙарына ат ҡараусы, күсер булып ялланып эшләй. Шул уҡ йылдарҙа Темәстәге рус-башҡорт мәктәбендә уҡып та йөрөй. Ул егет ҡорона етеүгә, Беренсе донъя һуғышы башланып китә. Шәмсетдин һалдат хеҙмәтенә алына.



*Ш.Ғафаров туғандарының ҡыҙҙары менән*

Ш.Ғафаров урта буйлы, төҫкә таҙа, бик ҡеүәтле егет була. Батша армияһында һуғышҡанда уҡ ғәййәрлеген күрһәтә, һәм уға фельдфебель хәрби дәрәжәһе бирелә (фельдфебель — немец һүҙе — унтер-офицер дәрәжәһе; унтер-офицер — кесе команда составы чины). Ләкин Шәмсетдиндең, бөлгөнлөктө күреп, был һуғыштың бер кемгә лә кәрәкмәгәнен аңлап, йөрәге һыҙлап йөрөй. Шуға ла ул 1917 йылдағы үҙгәрештәрҙе, бигерәк тә Октябрь революцияһын, шатланып ҡаршылай. Ул да, барлыҡ ярлылар кеүек, тыныс һәм мул тормош киләсәгенә ышана.

Башҡортостан автономияһы барлыҡҡа килеү менән, Муса Мортазин етәкселегендә Башҡорт ғәскәре тергеҙелә. Шәмсетдин Ғафаровты 27-се кавалерия полкының 4-се эскадронына командир итеп тәғәйенләйҙәр. Был эскадрон Муса Мортазиндың Башҡорт бригадаһы составында Уралдан Польшаға тиклем героик юл үтә. Башҡорт хәрби частары, Петроград эргәһендә Юденич ғәскәрен тар-мар итеүҙә аяуһыҙ көрәшеп, Петроград Советының Ҡыҙыл Байрағы менән бүләкләнә. Был алыштан һуң башҡорт частары, яңы хәрби задание алғансы, Псков өлкәһендәге Святые Горы ауылына урынлаштырыла. Улар бында 1919 йылдың көҙөнән 1920 йылдың март аҙағына тиклем була. Бына тап ошонда башҡорттар бөтә мәҙәниәт донъяһын хайран ҡалдырған бер эш эшләп китә. Улар Михайловское ауылында (Пушкиндарҙың имениеһы) емереклектәр, ҡаралмаған өйҙәрҙе күреп, шунда уҡ эшкә тотона. Имениены

рәтләп, Пушкиндың тәрбиәсеһенең өйөн ремонтлап ҡуялар. Ошо турала аҙаҡ, 1941 йылда, рус рәссамы, археологы, яҙыусыһы Николай Рерих (1874—1947) былай тип яҙа: "Хәтеребеҙҙә, Башҡорт полкы бөйөк шағир А.Пушкиндың имениеһын һаҡлап ҡалырға тырышҡан. Ҡемдән һуң? Рустарҙан (аҡтарҙан) бит!" Был изге эштә Шәмсетдин Ғафаровтың эскадроны ла ҡатнаша, әлбиттә.

Ошо мәлдәрҙә власты үҙ ҡулына алған Польша буржуазияһы менән алпауыттары Рәсәйгә һуғыш аса. Башҡорт частары Польша фронтына күсерелә. 1920 йылдың июнь башында Ш.Ғафаровтың атлы эскадроны йәшен тиҙлеге менән дошман төпләнгән Пиляево ауылына һөжүм итә. Поляк ғәскәре, ҡыҫымға сыҙай алмай, ҡасырға мәжбүр була. Дошмандың тубы һәм байтаҡ ҡоралы Ғафаров эскадронының ҡулына төшә. Ошо алыштағы батырлығы өсөн 24 йәшлек эскадрон командиры Шәмсетдин Шәйхетдин улы Ғафаров Реввоенсоветтың 1921 йылдың 17 февралендәге 57-се бойороғо буйынса Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнә.

Варшава йүнәлешендәге һуғыштарҙа күрһәткән ҡаһарманлыҡтары өсөн Ш.Ғафаровҡа Реввоенсоветтың 1921 йылдың 31 декабрендәге 353-сө бойороғо менән икенсе Ҡыҙыл Байраҡ ордены бирелә. Тимәк, Шәмсетдин Шәйхетдин улы икенсе тапҡыр илебеҙҙең геройы исемен ала. Һәм 25 йәшендә! Ҡолсора ауылы ҡарты Фазуллин Йосоп ағайҙың һөйләүе буйынса, Шәмсетдин Ғафаровҡа беренсе орденын Темәс ауылының ҙур йыйынында, икенсеһен Түбә ҡасабаһында оло байрам ойоштороп тапшыралар.

Ш.Ғафаров 1921 йылдың март аҙағынаса Киев хәрби округы 24-се уҡсылар дивизияһының 2-се Башҡорт кавалерия полкында взвод командиры булып хеҙмәт итә. Петлюра бандаларын тар-мар итеүҙә ҡатнаша. 1921 йылдың йәйендә Ш.Ш.Ғафаров демобилизациялана. 1921—1922 йылдарҙа Бөрйән-Түңгәүер кантонында хәрби комиссар, шунан Йылайыр кантоны хәрби комиссары урынбаҫары була. 1923—1924 йылдарҙа Ҡазан татар-башҡорт хәрби-сәйәси мәктәбендә уҡый. 1924 йылда Ш.Ғафаровты Ташлыла яңы ойошторолған балалар йортоноң директоры итеп тәғәйенләйҙәр. 1925—1928 йылдарҙа ул Түбә руднигында юғары вазифалар башҡара, Баймаҡта контроль-ревизия комиссияһына етәкселек итә.

Шәмсетдин Шәйхетдин улы Ҡолсораға ата-әсәһенең хәлен белергә ҡайтҡылай. Шул арала, ауыл малайҙарын йыйҙырып, уларҙы етеҙлек тәрбиәләүсе уйындар менән мауыҡтырып, ярыштырып, йүгертеп, алып ҡайтҡан бүләктәрен, күстәнәстәрен таратып биреп китә торған булған.

Яҙыусы Нәжип Иҙелбайҙың "Ҡолсора батыры" тигән очерггынан ("Совет Башҡортостаны", 1987 йыл, 10 ноябрь) Ш.Ғафаровтың ғәйрәтлеген һүрәтләгән бер өҙөк килтереп үтәйек. Был хәл Баймаҡта Бөйөк Октябрь революцияһының ете йыллығын байрам иткәндә була.

"Майҙан тулы халыҡ. Митинг алып барыусы бер ваҡыт: "Хәҙер джигитовка, йәғни Граждандар һуғышында ҡатнашҡан яугирҙарҙың сабып барған ат өҫтөндә уйыны буласаҡ!" — тип иғлан итте. Халыҡ, артҡараҡ сигенеп, майҙан түңәрәген киңәйтә төштө. Эйәрле ярһыу аттарға атланған егермеләп һыбайлы

майҙан уртаһына килеп инеүгә беҙҙең күҙҙәр дүрт булды. Тәүҙә һыбайлылар, бер-бер артлы теҙелешеп, түңәрәк буйынса юрттырып ҡына йөрөнөләр. Тора-бара, теҙгендәрен бушата төшөп, аттарын саптыра башланылар. Шул ваҡыт ни күҙебеҙ менән күрәйек: ялбыр яллы, оҙон тороҡло бер саптар ат, уҡ һымаҡ атылып, аранан алға сыҡты. Тәбәнәк буйлы, баҙыҡ кәүҙәле, киң яурынлы бер ағай йән-фарман сабып барған ат өҫтөндә туп һымаҡ уйнай. Елдереп ат өҫтөндә барған еренән ҡапыл ырғып төшә лә, аяҡтары ергә тейер-теймәҫтән тағы һикереп, йәнә эйәре өҫтөнә менә. Берсә алға, берсә артҡа ҡарап та ултыра йәки атының өҫтөнә һуҙылып ятҡан килеш тә, аяғөҫтө баҫып та саба бирә. Шулай йән-фарман саба торғас, баштүбән ташланды ла, эйәр бауырлығына йәбешеп, атының ҡорһағы аҫтынан һул яҡтан уң яғына үтә сығып, тағы ла эйәре өҫтөнә менеп ултырмаһынмы!..

Бына беҙ ағайҙы уратып алдыҡ: өҫтөнә ҡыҫҡа хәрби һырма куртка кейгән, иңенә еҙ тотҡалы ҡылыс аҫҡан, ялтыр итектәренең үксәһендә көмөш шпорҙар шылтырай, киң күкрәгендә ҡыҙыл таҫма өҫтөнә ҡаҙалған ике Ҡыҙыл Байраҡ ордены ялтырай. Бер ағай, ғорурланып, былай ти: “Беҙҙең яҡтың ирмен тигән ир-арыҫланы Шәмсетдин ағайығыҙ булыр был. Ҡолсора ауылынан. Ана бит, аҡтар менән айбарланып алышҡанда аты ла аҡһамаған, үҙе лә, түшен ордендар менән биҙәп, имен-һау йөрөп ҡайтҡан. Ҡулындағы ҡыйғыр ҡылысты ла уға батыр һуғышҡаны өсөн, исемен яҙып, бүләк итеп биргәндәр. Афарин!” Бында әйтелгән ҡыйғыр ҡылысты һәм уға ҡушып алтын ҡул сәғәтен Шәмсетдин Ғафаровҡа Семен Михайлович Буденный бүләк иткән булған”.

Тәжрибәле ойоштороусыны Баймаҡ районында оҙаҡ тотмайҙар — 1929 йылда Өфө ведомство милицияһының 1-се дивизион командиры итеп тәғәйенләйҙәр. 1934 йылдан 1937 йылдың сентябренә тиклем Ш.Ғафаров ведомство милицияһының айырым взводы командиры була. Өфөлә йәшәгәндә ул башҡорт интеллигенцияһы вәкилдәре менән йыш аралаша. Хәбибулла Ғәбитов менән яҡын дуҫтар булалар.

Шәмсетдин Шәйхетдин улының бер туған ҡустыһы Низаметдин Урта Азияла совет власын урынлаштырыу өсөн барған һуғыштарҙа ҡатнаша. Шуға ул, ҡатыны менән һөйләшеп, ҡустыһының Мөнирә исемле 5—6 йәшлек ҡыҙын үҙе тәрбиәләргә була. Тағы Ғәбиҙә тигән яҡын туғанын алдырта. Үҙҙәренең балалары булмай. Хәҙерге көндә, әлбиттә, был апайҙар — гүр эйәләре.

Ш.Ғафаровтың баш ҡалала гөрләтеп эшләп йөрөгән йылдары. 1937 йылдың сентябрь айында ул ҡартайған ата-әсәһенең хәлен белергә тип Ҡолсораға килә. Тап ошо мәл, атаһы йортонда, Баймаҡ милицияһы килеп, бер сәбәпһеҙ уны ҡулға ала. Ҡолсора ауылының иң оло кешеһе Баязитова Миңдинур инәй хәтерләй: милиция ҡараңғыла килеп төшә; Шәйхетдин ҡарт, Баязитовтарға инә һалып, бер аҙ аҡса биреп тороуҙарын үтенә. Күҙ йәше менән: “Шәмсетдинде алырға килгәндәр”, — ти. Атай йортоноң ишегенән сығыр саҡта Шәмсетдин батыр: “Совет хөкүмәте алдында бер ғәйебем дә юҡ. Мин ҡайтырмын, атай”, — тип ата-әсәһен йыуата.

Шәмсетдин Ғафаровты Өфөгә алып килеп, ВКП(б) сафынан сығарып, эштән бушатып, ордендарын тартып алып, төрмәгә ябалар. Туҡмай-туҡмай һорау алалар, уң ҡулын һындыра һуғалар. Ахыр сиктә унан: “1919 йылдың мартынан алып Муса Мортазиндың аҡтар отрядында эскадрон командиры булып хеҙмәт иттем. Башҡортостандағы ҡоралды контрреволюцион хәрәкәттә ҡатнаштым”, — тигән яуап алырға ныҡышалар. Ләкин Шәмсетдин Шәйхетдин улы намыҫына тоғро ҡала.

Шәмсетдин Ғафаров халҡыбыҙҙың ҡаһарман 25 улы менән бер көндә һәләк ителә. Егерме алты кеше иҫәбендә, Ш.Ғафаровтан тыш, Ҡыҙыл Байраҡ ордены кавалеры, һигеҙ бала атаһы Фәттәх Ибраһимов (Әбйәлил районы Әлмөхәмәт ауылынан), Башҡортостан хөкүмәте ағзаһы Ғәббәс Рыҫҡолов, Муса Мортазиндың өс ҡустыһы — Искәндәр, Әбүбәкир, Фәтих Мортазиндар, халыҡ мәғарифы комиссары Ибраһим Абыҙбаев һәм башҡа күренекле кешеләр була. Барыһы ла “тройка” тарафынан 58-се статья буйынса хөкөм ителеп, судһыҙ-ниһеҙ атып үлтерелә. Шәмсетдин Ғафаровты 1937 йылдың 8 декабрендә 7 сәғәт 25 минутта аталар. 41 йәшлек ҡаһармандың ғүмере шулай өҙөлә.

Халҡыбыҙҙың һөйөклө шағиры Рәми Ғарипов был осор тураһында һыҙланып ошолай тип яҙҙы:

Мең туғыҙ йөҙ утыҙ етенсе йыл!..
Мең туғыҙ йөҙ утыҙ етелә
Ҡан һуғарған, ут эсендә тыуған,
Саҡ-саҡ әле егермеһе тулған
Ярты баҡсабыҙ юҡ ителә,
Балта менән ҡырып кителә...

Егерме йыл үткәс, башҡа ҡорбандар менән бер рәттән Шәмсетдин Ғафаров та аҡлана.

Әлбиттә, халыҡ уҙ батырҙарын онотмай. Баймаҡ районының Ҡолсора мәктәбе Шәмсетдин Ғафаров исемен йөрөтә, ауылдың үҙәк урамы уның исеме менән аталған. Ул тыуып үҫкән өйҙөң урыны рәшәткә менән уратып алынып, обелиск ҡуйылған. Яҡын туғаны Ғәйзулла Ғафаровтың улы Айрат Ғафаров, күп көс һалып, күп ваҡыт архивтарҙа эҙләнеп, материал туплап, атыр алдынан тартып алынған ордендарын юллап алып, уның 100 йыллығын үткәргәйне. С.М.Буденный бүләк иткән исемле ҡылыс менән алтын сәғәт табылманы. Үкенескә ҡаршы, Айрат Ғафаров, ошо сара тамамланғас, ҡайтыр юлға сыҡҡанда инфарктан һәләк булып ҡуйҙы. Ул ҡайһы бер ниәттәрен тормошҡа ашырып өлгөрмәне. Артабан эште ошо юлдарҙың авторы, А.Ғафаровтың ҡатыны, дауам итте. Сибай ҡалаһының яңы микрорайонының бер урамына Шәмсетдин Ғафаров исеме бирелде, урамдағы беренсе өйгә уның тураһында яҙылған иҫтәлекле таҡтаташ ҡуйылды, аят уҡылды. “Ш.Ғафаров урамы” исеме Сибай энциклопедияһына индерелде (138-се бит). “Башкирская энциклопедия” китабының 2-се томында статья сыҡты (236-сы бит). Баймаҡ энциклопедияһында ла уның тураһында һәйбәт статья сығарылды (197-се бит).